***Зәки ӘЛИБАЕВ,***
***филология фәндәре кандидаты***

# ОЛО ЭШКӘ БАҘНАТ ИТЕП

*Кеше һәм тәбиғәт. Фани донъябыҙҙа, йәшәйешебеҙҙә күҙгә күренгән һәм әллә күпме беленер-беленмәҫ ептәр менән бәйләнгән был ике төшөнсәне айырым карап та булмайҙыр. Ҡайһы яктан ғына бакһаң да, улар бер бөтөн, йәки илаһи гармониялы күренеш булып күҙ алдына баҫа. Бәйләнеш, тинем, ә бит һәр ҡайһыһында мәңгелек сер батшалығы хакимлык итә түгелме? Кеше үҙ-үҙенә, тирә-йүнгә, тәбиғәткә бағып, һорауҙар һәм ҡыҙыҡһыныуҙар сылбырының осона сыға аламы?*



*Рәссам Фәйзрахман Исмәғилев*

Фәйзрахман Исмәғилевтың оҫтаханаһында булған һайын ошо һорауҙар янар оҫҡон кеүек күңелде телгеләп, тынғылыҡ бирмәй. Буяуҙар, төҫтәр донъяһына сумып, бөтөнләй онотолған кеүек булһаң да, һүрәттәрҙәге күңел нағышына һалынған нур, ҡараштарҙы ялмап алып, үҙ өйөрмәһенә ҡайтара. Иҫтәлектәр, уйҙар тулҡынында рәссам донъяһына сумам.

Бына "Ҡыҙыл таш" картинаһы. Хәүефлелек, психологик ритмдарға бер аҙ саялыҡ өҫтәүсе һорғолт-ҡыҙыл төҫтәр полотноның тышҡы күренешен биҙәй. Аҡлан уртаһындағы оло ҡыҙғылт ташҡа соҡоп руналар яҙылған. Ҡыҙғылт таштың нурынан аҡлан да, тирә-йүндәге тауҙар ҙа һүрәтләнеп, уй-фекерҙәрҙең дауамы булып тора. Мәжүси халыҡта таш ғәжәп көскә эйә: йәнле һәм йәнһеҙ тормоштоң торошон, тәбиғәт һәм кеше хәрәкәтен, мөнәсәбәттәрен төрлө юҫыҡҡа йүнәлтергә мөмкин. Изге таш, һынташ, ҡәбер таштары. Рәссамдың һәр төҫ ҡеүәһенән әллә күпме фәлсәфәүи ағым, тау йөрәген ярып сыҡҡан шишмәне хәтерләтеп, сылтырап урғыла. Һүрәттең темаһы ла буш ерҙә яралмаған йәки күктән килеп төшмәгән. Фәйзрахмандың тыуған яғы Белорет районында тәбиғәттең ғәжәп үҙенсәлекле һәм серле күренеше — Йәй ташы бар. Ул ошо тирәләге иң изге әйберҙәрҙән һанала. Әгәр ҙә уға әҙәми зат тейһә, мүген ҡуптарһа, көндәр



*С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары БР Президенты М.Ғ.Рәхимов менән*

боҙолоуын көт тә тор. Муллалар килеп, төрлө аҙыҡ-түлек (май, ҡаймаҡ) менән ризалағандан һуң ғына һауа торошо ипләнеп китә. Шуға ла урындағы халыҡ Йәй ташына хөрмәтләп ҡарай, уның серле көсөнә ышана. 1989 йылда венгр ғалимы Йозеф Торма ла унда булып, был хаҡта үҙенең күҙәтеүҙәрен яҙып сыҡты. Фәйзрахмандың "Ҡыҙыл таш" картинаһын яҙыуына тыуған яғының Йәй ташы этәргес көс була, дөйөмләштереү, фәлсәфәүи нигеҙҙә ҙур полотно тыуа. Ҡыҙғылт-һоро таш, алыҫ-алыҫ тауҙар теҙмәһе... Бер яҡтан ҡараһаң, йән өшөткөс күренеш — ә бит былар кешелектән ҡалған яҙыу. Таштағы эҙҙәр... Офоҡтағы байып барыусы ҡояштың һүрән нурҙарына мансылған һуңғы рух балҡышымы? Бар зиһенде ялмап алып, уйландыра ул, һорауҙары асырғанып яуап көтә.

Оҫтахананы биләп алған серлелектең башы ғына был. Тар коридор буйлап теҙелгән ағас рамдар, сихри моң даръяһына илтеүсе аудиояҙмалар, тәбиғәттең илаһи мәлен хәтерләтеүсе кипкән ялан сәскәләре, ҡайын миндеге, илһам сығанағы булып, ҡот-йәм биреүсе шиғри йыйынтыҡтар — барыһы ла урынлы, йәтеш һәм улар оҫтаға тәбиғәттең ҡабатланмаҫ серен һөйләй буғай.

Рәссамдың оҫтаханаһы бейек, яҡты, иркен. Иң мөһиме — бында һәр саҡ ижади атмосфера хакимлыҡ итә. Шуға ла Фәйзрахмандың дуҫтары, таныштары серле донъя батшаһына, ихлас һәм ҡунаҡсыл хужа янына теләк менән килә. Тормош ваҡлыҡтарынан алып, дөйөм мәңгелек һорауҙарға тиклем барып еткән бәхәстәрҙе, аҡыллы кәңәш һәм фекер алышыуҙарҙы оҫтаханала йыш ишетергә мөмкин. Бәхәстәрҙә дөрөҫлөк тыуа, тигән әйтем

күп яғы менән оҫтахана ултырыштарына тап килә. Ана, уртала торған ”Өйрөлмәк” һүрәте 80-се йылдарҙа уҡ яҙыла башланған. Ҡарағусҡыл-зәңгәр, төпһөҙ йылғалағы өйрөлмәк бар көсө менән өйөр аттарын үҙенә ялмап алған. Күк яллы толпарҙар һуңғы көсөн туплап ытырғаныпп, ағымдан ҡотолорға, өйрөлмәктән сығырға ынтыла. Тик һуң инде. Һыу батшалығы тағы ла бер әйләндерәсәк тә йән әсеткес кешнәгән тауыштар менән был аҡыллы ҡараштарҙы үҙенә йотасаҡ. Өйрөлмәк алдында толпарҙар ҙа хәлһеҙ. Ә бит һүрәт торғонлоҡ заманын бар асылында сағылдыра. Ул мәлдә торғонлоҡ тураһында ләм-мим ине. Фәйзрахман ошо хаҡта тәрән уйланыуҙарын, реаль тормошто ошондай образдар аша бик оҫта сағылдырған. Дөрөҫ, һүрәттәрҙәге образдар күктән килеп төшмәй, ә милли үҙаңды билдәләүсе традицион ептәргә барып тоташа. Күптәрҙең һөйөүен яулаған ”Күк бүре” лә башҡорт халҡының тарихи легендаларына, милләттең аяныслы, әммә ғорур яҙмышына нигеҙләнеп ижад ителгән. Олоғайған күк бүре, ҡараштарын алға ташлап, әкрен аҙымдар менән хәрәкәт итә. Уның күҙ ҡараштарында һағыш та, бар булмышын сағылдырған ғорурлыҡ та эркелеп тора. Табандарын ергә ныҡлы терәп, ышаныслы атлай. Алға бара. Тимәк, ҡөҙрәт, ҡот өҫтәүсе йәндә ышаныс юғалмаған әле.

Фәйзрахман Исмәғилевтың ижадында бер нисә йүнәлеште билдәләп үтергә мөмкин: тәрән психологик кисерештәргә нигеҙләнгән портреттар, фәлсәфәүи даирәне яҡтыртыусы полотнолар һәм пейзаж. Тәбиғәт күренештәре лә асылда фәлсәфәгә ҡайтып ҡала.

Ҡасандыр Һәҙиә Дәүләтшина, Ғөбәй Дәүләтшин, Рәшит Нигмәтиҙәрҙең тыуған яҡтары — Һамар өлкәһе ауылдарында булып ҡайтыу рәссамды ныҡ тетрәндерә. Ундағы халыҡ менән аралашып, бай милли традицияларҙы һаҡлап алып ҡалыуҙарына хайран ҡала. Һәм ошо нигеҙҙә ”Яңғыҙ тирмә” һүрәте яҙыла.

Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған рәссамы Фәйзрахман Исмәғилев һуңғы йылдарҙа һынлы сәнғәт донъяһына өр-яңы темалар алып килде. Ул бигерәк тә халҡыбыҙҙың тарихы, данлыҡлы үткәне менән ҡыҙыҡһынып, оло табыштарға юлыҡты. Нәфис әҙәбиәт аша таныш ваҡиғалар, рәссамдың күңел донъяһына үтеп инеп, ижад ҡомарын шуға табан йүнәлткән. Ата-бабаларҙың батыр образдары әҙәбиәттә генә түгел, ә ул күҙ алдына баҫтырған һынлы сәнғәттә нисек булыр ине? Сөнки был тема менән бөгөн генә осрашмай бит. Бала саҡтан өләсәһе Гөлйемеш инәйҙең, олатаһы Ибраһим бабайҙың хикәйәттәрен, легендаларын, тарихнамәләрен тыңлап үҫкән егеттә тарихҡа ҡарата оло ихтирам һәм иғтибар тәрбиәләнгән. Шуға күрә, ябай пейзаж төшөрә башлаһа ла, уның өсөн был ерҙең исем-атамаһы, ҡыҫҡаса тарихы бик мөһим. Автор ошо сығанаҡтар аша тәбиғәттең эске һулышын, кеше менән мәңгелек гармонияһын күрә һәм тоя.

Фәйзрахмандың рәссам булып китеүенә лә уның күңел донъяһы-

ның үтә нескәлеге, тәбиғилеге, тыуған яғының илаһилығы ла булышлыҡ иткәндәр. Малай саҡта шау-гөр килеп төрлө уйындар уйнау (бигерәк тә хәрби уйындар), уларҙың бар булмышты яулап алыуы ғына ни тора! Һәр малайҙың күңелендә батырлыҡ рухы, Салауатҡа тиңләшеү, шул осорҙоң ваҡиғаларын күҙ алдына баҫтырып, заман сылбырҙарын яуларға ярҙам иткәндер.

Фәйзрахман Абдрахман улы оҙаҡ йылдар халҡыбыҙҙың батырлыҡ юлдарын өйрәнә, аңына һеңдерә бара. Тарихсы Әнүәр Әсфәндиәровтың "Любезные вы мои!", "Олатайҙарҙың бар тарихы" китаптары күңел ҡылдарын айырыуса тибрәтә. Рәссамдар үҙ-ара осрашҡан саҡта "Ниңә әле беҙгә ошо темаға тотонмаҫҡа? Кузнецов, Тавасиевтар ғына эшләү етәме?", тип, бер-береһенең сәмдәрен ҡуҙғата.

— Бигерәк тә мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Хәләф Ишморатовтың "Эй, егеттәр, ҡулығыҙҙан килгәнде ниңә баҙнат итмәҫкә!" тип әйтеүе эшкә тотоноуға ҙур этәргес булды, — тип хәтерләй рәссам.

Уҙған йыл халҡыбыҙ үҙенең милли батыры Салауат Юлаевтың 250 йыллыҡ күркәм юбилейын билдәләп үтте. Сәнғәт әһелдәре лә ошо уңайҙан батырыбыҙға арнап өр-яңы әҫәрҙәр ижад итте. Рәссам Фәйзрахман Исмәғилев тә был саранан ситтә ҡалманы. Һәләтле рәссам Илдар Ғаянов менән берлектә бер нисә шәлкем картина яҙҙылар. Талантлы рәссамдарҙың хеҙмәте киң танылыу яуланы һәм лайыҡлы баһа алды — Ф.Исмәғилев менән И.Ғаянов ижад иткән "Салауат тураһында хикәйәт" һәм "Башҡорттар 1812 йылғы Ватан һуғышында" шәлкемдәренән туплanған картиналар Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды.

"Салауат тураһында хикәйәт" шәлкеме биш полотнонан тора. Киң эпик ҡоласлы, тәрән психологизм менән һүрәтләнгән "Салауаттың бала сағы", "Атай һәм ул", "Салауат менән Пугачев осрашыуы", "Салауат Юлаев һәм полковник Белобородов отрядының Уса ҡәлғәһен ҡамауы", "Оран" картиналары милли батырыбыҙҙың характерын ғына түгел, шанлы һәм данлы ваҡиғаларҙың эволюцияһын да сағылдыра. Әлбиттә, бындай ҙур һәм яуаплы эш башлағанда байтаҡ эҙләнергә, тарихи документтар менән танышырға тура килә рәссамдарға. Илдар Иҡсан улы Балтас районының Һәйтәк ауылынан, мәктәпте Нөркә ауылында тамамлаған. Тап Нөркә ауылы янында Салауаттың батша ғәскәренә ҡаршы яуы бик ҡыҙыу барған. Ялан яҡтарында һуғыш алып барыу тәжрибәһе самалыраҡ булыу арҡаһында милләттәштәребеҙ еңелә.

"Нөркә ауылына килгән һайын ошо ваҡиғаларҙы уйлап йөрәк һыҙлай ине", — тип хәтерләй Илдар. "Салауаттың тышҡы ҡиәфәтен, характерын тыуҙырыуҙа уның яҡташтары, йырсы Мәжит Алкин бик ныҡ ярҙам итте", — ти Фәйзрахман.

Ә алты картинанан торған "Башҡорттар 1812 йылғы Ватан һуғышында" шәлкеме милләттәштәре-

беҙҙең яу ваҡиғаларын тулы итеп күҙ алдына баҫтыра. ”Һуғышҡа саҡырыу” (Александр I бойороғо), ”Башҡорт атлылары Березина янында алышта”, ”Бородино яланында алышта”, ”Елисей яландарында”, ”Сен-Жермен майҙанында”, ”Ҡайтыу” исемле картиналар рәссамдарҙың күңел йылылығы, тарихи сығанаҡтар менән үтә лә һаҡ һәм төплө эшләүе тураһында һөйләй. Материалдар туплағанда Фәйзрахман Исмәғилевтың Францияға сәфәр йөрөп ҡайтыуы ла файҙаға ғына була. Был тема башҡорт һынлы сәнғәтендә тәүге тапҡыр күтәрелеүен дә билдәләп үтергә кәрәк.

”Ни өсөн был эшкә икәүләп тотондоғоҙ?” — тип ҡыҙыҡһынғас, рәссамдар: ”Беҙ икебеҙ ике ҡарашлы рәссам. Һәр нәмәгә үҙебеҙҙә генә тупланған мөнәсәбәт бар. Бына ошо бәхәстәр аша бынамын тигән шәп фекер тыуа, иҫбатлау өсөн төҫтәр һайлауҙа ярҙам итә”, — тинеләр.

Ысынлап та, картиналар шәлкеме үҙенең тулылығы, бөтөнлөгө, төҫтәр гаммаһының үҙенсәлеге һәм фекер тәрәнлеге менән айырылып тора. Шуға ла уларҙың башҡорт һынлы сәнғәтендә оло бер ваҡиға булыуы бәхәсһеҙ.

Фәйзрахман Исмәғилевтың ижады үҫә, камиллаша бара. Ул киләсәктә лә батырлыҡ тематикаһын дауам итергә ниәтләй.

Рәссам Ф.Исмәғилевты бәхетле яҙмышлы шәхес, тип әйтергә мөмкин. Яраткан ҡатыны менән татыу ғаиләлә өс бала тәрбиәләп үҫтерҙеләр, ейәндәренә ҡыуанып, туғандары һәм бихисап дуҫтары менән аралашып йәшәйҙәр. Үҙе ғүмер буйы ынтылған, яратҡан шөғөлө бар. Эшенә күрә баһаһы ла көттөрмәй. Республика, зона, Рәсәй, халыҡ-ара күргәҙмәләрҙә ҡатнашып, һүрәттәре һәр саҡ ыңғай яҡтан билдәләнеп килә.

Ғөмүмән, рәссам ҡайҙа ғына йөрөһә лә, ниндәй генә тема өҫтөндә эшләһә лә, һәр саҡ күҙ алдына күркәм тыуған яғы — Йөйәк ауылы, йәмле Инйәр буйҙары, армыт-армыт тауҙары һәм ошо төбәктең ихлас кешеләре һәр саҡ күҙ алдында. Фәйзрахман өсөн улар изгелек бөркөүсе илһам сығанағы ла, күңел моңоноң бишеге лә. ”Тау күле”, ”Инйәр буйында”, ”Иртә менән”, ”Тынлыҡ”, ”Бала саҡ” картиналары ла тыуған яғының тулы һулышын аса төҫлө. Файзрахман барлыҡ күренештәрҙе күңел, тойғо һәм йөрәк аша үткәреп, буяуҙар донъяһына, хыялына күсерә бара. Рәссам шуны белә: тормош саҫҡыһын тоҡандырған тыуған яҡтың изге төшөнсәләре, бер ваҡытта ла үҙ баһаһын юғалтмайса, үрҙәргә илтә. Ә ошо изге ергә табыныуҙан, ышаныстан да бөйөк нәмә юҡтыр ул.

Фәйзрахман Абдрахман улының ижадының сәскә атҡан осоро. Эшләгән эштәре лә байтаҡ. Ғөмүмән, ул ҡул ҡаушарып ултырырға йыйынмай. Ижад офоҡтарында өр-яңы темалар, яңы бейеклектәр күренә. Тәүәккәл рәссамдың төплө һәм нигеҙле теләктәрен тормошҡа ашырыр тырышлыҡ та тәбиғәттән. Ул үҙе әйтмешләй: ”Баҙнат ҡына итергә кәрәк!”